БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫНЫҢ ҒАФУРИ РАЙОНЫ
ЮЛЫҠ АУЫЛЫНЫҢ МУНИЦИПАЛЬ БЮДЖЕТ
ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
ТӨП ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ МӘКТӘБЕ

| | | |
|---|---|---|
| МБ етәксеһе: | Килешелде | Раҫланды |
| Протокол №1 | Уҡытыу-тәрбиә эштәре б-са | Приказ №_____ |
| «____ » август 2025 й. | директор урынбаҫары: | «___» __________2025й. |
| | ___________ /Юлыҡова С.Ә/ | Директор________________ |
| | | /Ғафарова Э.Т./ |

“Туған (башҡорт ) теле” һәм “Туған (башҡорт) әҙәбиәте”
предметтарынан
адаптив эш программаһы
5-се класс
төп дөйөм белем биреү
2025-2026 уҡыу йылы

Төҙөнө: юғары категориялы
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Яҡшыбаева Альмира Әхмәт ҡыҙы

2025й.

“Туған( башҡорт ) теле” һәм “Туған (башҡорт)әҙәбиәте”
предметтарынан эш программаһы түбәндәге документтарға нигеҙләнеп төҙөлдө:

- Рәсәй Федерацияһының “Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында” федераль законына (29 декабрь, 2012 йыл, № 273- ФЗ);
- Башҡортостан Республикаһының “Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында” законына (1 июль, 2013 йыл, №696-з);
- “Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында” Рәсәй Федерацияһы Законына (25 октябрь 1991 йыл, № 1807-1);
- “Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында” Башҡортостан Республикаһы Законына (17.03.2003, № 482-з, 28.12.2009, № 192-з.) ;
- Төп белем биреү дәүләт стандарттарының федераль компонеты (РФ-ның мәғариф һәм фән министрлығы ,05.03.2004 № 1089 (ред. 23.06.2015);
- Юлыҡ ауылының муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы урта дөйөм белем биреү мәктәбенең төп дөйөм белем биреү программаһына;
- Юлыҡ төп дөйөм белем биреү мәктәбенең 2025-2026 уҡыу йылына Уҡыу планына ;
- мәктәптең уҡыу предметының эш программаһы тураһындағы Положениеһына;
- Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған Уҡытыу туған телдә алып барылған мәктәптәрҙең I-XI кластары өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте программаһына

## 1.Уҡыу предметын үҙләштереүҙә планлаштырылған һөҙөмтәләр

Башҡорт теле-башҡорт халҡының туған теле һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булып һанала. Башҡорт теле баланың фекер үҫешенә булышлыҡ итә; уҡыусылырҙың интеллектуаль һәм ижади һәләтен үҫтерергә ярҙам итә; белем һәм күнекмәләрҙе үҙ аллы үҙләштереү һәләттәрен үҫтерә, шулай уҡ уҡыусыларҙың үҫтереүсе уҡыу эшмәкәрлеген ойоштора. Әммә һаулыҡтары яғынан мөмкинлектәре сикләнгән балаларға башҡорт теле программаһын тулы килеш үҙләштереүе ауыр. Шуға күрә был балаларға тел һәм әҙәбиәт буйынса белем биреүҙә бөтөнләй ***икенсе маҡсат һәм бурыстар*** ҡуйыла.Мәктәптә урта кластарҙа (5-9) һаулыҡтары яғынан мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн шул уҡ программа ҡалдырыла,әммә индивидуаль,шәхсән эшләүҙе күҙ уңында тота,баһалауҙың да кимәле бер аҙ төшөрөлә.Тик бында уҡыусыларҙың курс йөкмәткеһен ниндәй кимәлдә үҙләштереүенән сығып,өҫтәлмә бурыстар алырға ла мөмкин.

***Уҡыусылар :***

-башҡортса текстарҙы аңлы,тасуири уҡыу күнекмәләренә эйә булырға;
-грамоталы яҙыу күнекмәләре алырға;
-.телдән һәм яҙма формаларҙа фекерҙәрен еткерергә;
-үҫеше һәм формалаштырылған әхлаҡи сифаттары менән тормошҡа яраҡлаша белергә тейеш.

Бындай уҡыусыларҙың телмәрҙәрен һәм фекерләү ҡеүәһен коррекциялау уҡыу процесының төп өлөшөн тәшкил итә һәм белем,күнекмәләр биреү,шәхесте тәрбиәләү менән бергә хәл ителә.

***Уҡыу.***

***5-8-се*** кластарҙа уҡыу дәрестәрендә уҡыусыларҙың уҡыу техникаһын үҫтереү өҫтөндә эш дауам ителә:уҡыған материалдың йөкмәткеһен аңлау менән бергә дөрөҫ,етеҙ,тасуири уҡырға өйрәнеү ҙә ҡарала.Тәҡдим ителгән художестволы әҫәрҙәр төрлө жанрҙарҙа булыу сәбәпле балаларҙа уҡыу һәм йөкмәткеһен аңлау йәһәтенән ҙур ауырлыҡтар тыуҙырырға мөмкин.Был категорияға ҡараған балалар яҙыусыларҙың биографик белешмәләрен,хатта ҡыҫҡаса ижад юлын да ауырлыҡ менән ҡабул итәләр.Уҡыған әҫәр өҙөктәренән геройҙарын билдәләй алмаған осраҡтар була.Тарихи әҫәрҙәрҙә һүрәтләнгән ваҡиғаларҙы әйтә алмайҙар,текстағы һүҙҙәрҙе,һүҙбәйләнештәрҙе аңламайҙар .Шуға күрә уҡыу дәрестәрендә уҡыу техникаһын үҫтереүҙән тыш төп бурыс итеп билдәле кимәлдә текстарҙың,әҫәр өҙөктәренең йөкмәткеһен үҙләштереү ҡуйыла.Шул нигеҙҙә уҡыусыларҙың телмәре һәм фекерләүе үҫтерелә.

Уҡыусылар ҡуйылған һорауҙарға яуап бирә ,яуаптарҙы текстан таба белергә тейештәр; текст,әҫәрҙәрҙең ҡыҫҡаса нимә тураһында икәнлеген әйтә белергә ;төп һәм икенсел геройҙарын күрһәтә,ҡылыҡһырлама бирә белергә ,поступоктарын аңлата алырға ; шулай уҡ әҫәр буйынса һығымта яһай белеү күнекмәләренә эйә булырға тейеш.Был уҡытыусынан етди методик әҙерлек талап итә.

***Грамматика һәм орфография.***

Билдәле бер кимәлдә грамматиканы һәм дөрөҫ яҙылышты өйрәнеү барышында уҡыусыларҙың һөйләү һәм яҙма телмәрҙәре,орфографик һәм пунктуацион күнекмәләре үҫешә.Грамматиканың элементар курсы уҡыусыларҙың юғары психик функцияларын

коррекциялауға йүнәлтелә.Был иһә аҡыл һәм телмәр үҫешен уңышлыраҡ тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирә.

***Хәрефтәр һәм өндәр.***

Өн һәм хәреф айырмаһын ,дөрөҫ һүрәтләнешен,өндәрҙең тартынҡы һәм һуҙынҡыларға бүленешен белергә ,фонетик анализ яһау күнекмәһенә эйә булырға тейеш.

***Һүҙ.***Һүҙ төҙөлөшө,мәғәнәһе,яҙылышы,төркөмдәре уҡыусының һүҙлек байлығын үҫтереүгә йүнәлтелә.
Һүҙҙәрҙең ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарағанын айыра белергә,өлгөләргә ҡарап билдәле кимәлдә анализ яһарға өйрәтеү ҡарала.

***Һөйләмдәр.***Һөйләмдәрҙе өйрәнеүгә етди иғтибар бирергә кәрәк.Был бөтә курс барышында ла өйрәнелеүсе бүлек.Сөнки көндәлек тормошта был бик мөһим сара.Шуға ябай һөйләмдәрҙең төрлө төрҙәренән алып ҡушма һөйләм төрҙәренә тиклем төҙөргә,ҡулланырға өйрәтергә кәрәк.
***Бәйләнешле телмәр.***Бәйләнешле телмәр үҫтереүгә айырым иғтибар биреү мотлаҡ,сөнки психик яҡтан үҫеше артта ҡалған уҡыусыға үҙенең фекерен яҙма рәүештә еткереү бик ауыр бирелә.Шуға күрә фонематик ишетеү һәләтен,дөрөҫ әйтелеш күнекмәләрен,һүҙлек байлығын үҫтереү,һөйләмдәр төҙөү,уй-фекерҙәрен әйттереү өҫтөндә бер туҡтауһыҙ эш алып барырға кәрәк.Текстарҙағы һөйләмдәрҙе тәртипкә килтереү,корректорлау, һорауҙарға яуап биреү,һорауҙар төҙөү кеүек эштәр ҙур кластарҙа ла алып барылырға тейеш,был иһә үҙ йәһәтенән уҡыусыға бәләкәй күләмле изложение йәки инша яҙа алыу мөмкинлеген бирәсәк.
Шулай уҡ эш ҡағыҙҙары тултырыу күнекмәләре булдырыу мөһим:

ғариза,автобиография,расписка яҙыу;бланк,квитанциялар тултырыу.

**Яҙыу.**График күнекмәләр башланғыс кластарҙа булдырылһа ла,был категория уҡыусыларына әленән-әле ҡабатлатып, нығытып торорға кәрәк.Был йүнәлештә текстарҙы дөрөҫ күсереп яҙыу,кәрәкле хәрефтәр,тыныш билдәләре,төшөп ҡалған һүҙәрҙе өҫтәп ҡуйыу кеүек эштәр иғтибарҙы ғына үҫтермәй,матур,бөхтә,еренә еткереп эшләүгә ынтылыш ла тәрбиәләй.

## 2.Уҡыу предметының төп йөкмәткеһе

**“ Башҡорт теле”**

**Тел буйынса түбән синыфтарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау.**

**Фонетика һәм орфоэпия**. Өн һәм хәреф. Башҡорт теленең өндәр системаһы. Уларҙы белдергән хәрефтәр. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре, уларҙы белдергән хәрефтәр.

**Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр.** Һуҙынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше. Башҡорт телендәге һуҙынҡы өндәрҙең әйтелешен рус телендәге һуҙынҡы өндәрҙең әйтелеше менән сағыштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.Тартынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше.

**Башҡорт телендә сингармонизм.** Башҡорт телендә сингармонизм, уҡыусыларҙы уларҙың төрҙәре менән таныштырыу. Фонетик күнегеүҙәр

**Башҡорт телендә ижектәр.** Ижектәрҙең төрҙәре. Һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсереү ҡағиҙәләре менән танышыу.

**Башҡорт телендә баҫым**, уның үҙенсәлектәре. Баҫымдың һуңғы ижеккә төшөүе һәм ялғау ҡушҡан һайын күсә барыуы..

**Башҡорт телендә һүҙҙәрҙең тамыры, ялғауҙар тураһында** төшөнсә биреү.

**Башҡорт теленең һүҙлек байлығы**, уның сығанаҡтары. Төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр

**Башҡорт телендә нығынған һүҙбәйләнештәр**.

**Башҡорт телендә һүҙьяһалыш**. Һүҙ составы. Тамыр. Нигеҙ. Ялғауҙар. Ялғауҙарҙың төрҙәре: һүҙ һәм төр яһаусы ялғауҙар, үҙгәртеүсе ялғауҙар

**Башҡорт теле буйынса йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау**. Бәйләнешле телмәр үҫтереү. Орфоэпик ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ ҡулланыуға, тексты интонация менән уҡыуға күнегеүҙәр.

# Календарь-тематик планлаштырыу. Башҡорт теле. 5-се класс. 2025/2026.

| № | Тема | *Дата* | *Фактик дата* | *Иҫкәрмә* |
|---|---|---|---|---|
| **I сирек** | | | | |
| 1 | Инеш. Тел - аралашыуҙың иң мөһим сараһы. | *01.09.* | | |
| 2 | **Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. (5сәғ.)**<br>Һүҙ киҫәктәре. | *06.09.* | | |
| 3 | Исем | *07.09.* | | |
| 4 | Сифат | *08.09.* | | |
| 5 | Һан | *13.09.* | | |
| 6 | Ҡылым | *14.09.* | | |
| 7 | Иҫкәртмәле диктант. **Дуҫтар.** | *15.09.* | | |
| 8 | **Синтаксис һәм пунктуация.Телмәр мәҙәниәте**.<br>Һүҙбәйләнеш. | *20.09.* | | |
| 9 | Һүҙбәйләнеш. Һүҙбәйләнеште тикшереү тәртибе. | *21.09.* | | |
| 10 | Һөйләм | *22.09.* | | |
| 11 | Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр | *27.09.* | | |
| 12 | Һөйләмдең баш киҫәктәре | *28.09.* | | |
| 13 | Йыйнаҡ һәм таркау һөйләмдәр | *29.09.* | | |
| 14 | Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре | *04.10.* | | |
| 15 | Аныҡлаусы | *05.10.* | | |
| 16 | Тултырыусы | *06.10.* | | |
| 17 | Хәлдәр | *12.10.* | | |
| 18 | Һөйләмдең тиң киҫәктәре | *13.10.* | | |
| 19 | Һөйләмдең тиң киҫәктәре | *18.10.* | | |
| 20 | Текст | *19.10.* | | |
| 21 | Өндәш һүҙ | *20.10.* | | |
| 22 | Ҡушма һөйләм | *25.10.* | | |
| 23 | **Контроль диктант. Йәйге кис.** | *26.10.* | | |
| 24 | Хаталар өҫтөндә эш. Тура телмәр. | *27.10.* | | |
| **II сирек** | | | | |
| 25 | Диалог. | *08.11.* | | |
| 26 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | *09..11.* | | |
| 27 | Изложение. Тейен. | *10.11.* | | |
| 28 | Изложение.Тейен. | *15.11.* | | |
| 29. | **Фонетика һәм графика.**<br>**Орфография. Телмәр мәҙәниәте.**<br>**(15+2 сәғәт)**<br>**Үтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөү.** | *16.11.* | | |
| 30 | Өн һәм хәреф. Алфавит. | *17.11.* | | |
| 31 | Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр | *22.11.* | | |
| 32 | Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр.Ике өндө белдереүсе хәрефтәр. Өндө белдермәүсе хәрефтәр. (**Өйгә эш: А. Костин. «Ураҡ өҫтө» картинаһ**ы.) | *23.11.* | | |
| 33 | Өн һәм хәреф. Алфавит. | *24.11.* | | |
| 34 | Фонетик тикшереү тәртибен өйрәнеү. | *29.11.* | | |
| 35 | Һүҙҙәргә фонетик анализ | *30.11.* | | |
| 36 | Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы:<br>о, ө, ы, е (э). | *01.12.* | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 37 | Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы:<br>е, ё, ю, я. | *06.12.* | | |
| 38 | Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы. Ике һуҙынҡы араһында ҡ, к, п. | *07.12.* | | |
| 39 | Ижек. Уларҙың төрҙәре | *08.12.* | | |
| 40 | Баҫым | *13.12.* | | |
| 41 | Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ әйтелеше | *14.12.* | | |
| 42 | Тартынҡыларҙың  дөрөҫ әйтелеше | *15.12.* | | |
| 43 | Өндәрҙең оҡшашыуы | *20.12.* | | |
| 44 | **Изложение. Аҡҡош күле.** | *21.12.* | | |
| 45 | **Контроль диктант. Ҡояш.** | *22.12.* | | |
| 46 | **Хаталар өҫтөндә эш.** Фонетика бүлеген ҡабатлау. | *27.12.* | | |
| 47 | **Лексика. Телмәр мәҙәниәте.**<br>**(7+1 сәғәт)**<br>Лексика тураһында төшөнсә. | *28.12.* | | |
| 48 | Һүҙҙең мәғәнәһе | *29.12.* | | |
| | **III сирек** | | | |
| 49 | Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге | *11.01.* | | |
| 50 | Һүҙҙең күсмә  мәғәнәһе | *12.01.* | | |
| 51 | Синонимдар | *17.01.* | | |
| 52 | Антонимдар | *18.01.* | | |
| 53 | «Лексика» бүлеген ҡабатлау.<br>**Үҙаллы эш.** | *19.01.* | | |
| 54 | А.Костиндың «Ҡыш» картинаһы буйынса **инша.** | *24.01.* | | |
| | **Һүҙьяһалыш һәм орфография. Телмәр мәҙәниәте. (8+2 сәғәт)** | | | |
| 55 | Тамыр һәм ялғауҙар | *25.01.* | | |
| 56 | Ялғауҙарҙың  төрҙәре | *26.01.* | | |
| 57 | Тамыр һәм яһалма һүҙ | *31.01.* | | |
| 58 | Төп башҡорт һүҙҙәрендә ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы | *01.02.* | | |
| 59 | Рус теле аша ингән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы | *02.02.* | | |
| 60 | Рус теле аша ингән һүҙҙәрҙә<br>ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы | *07.02.* | | |
| 61 | Һүҙьяһалыш. Һүҙҙәрҙең яһалыу юлдары | *08.02.* | | |
| 62 | Ҡушма һүҙҙәр | *09.02.* | | |
| 63 | Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы | *14.02.* | | |
| 64 | **Изложение. Янғантау.** | *15.02.* | | |
| 65 | **Контроль диктант. Туған телең-хазинаң.** | *16.02.* | | |
| | **Морфология. Орфография.**<br>**Телмәр мәҙәниәте. (Исем (10+3 сәғәт); Ҡылым(17+4 сәғәт)** | | | |
| 66 | Үҙ  аллы һәм ярҙамсы  һүҙҙәр | *21.02.* | | |
| 67 | Һүҙ  төркөмдәре | *22.02.* | | |
| 68 | Исем. Мәғәнәһе, функцияһы | *28.02.* | | |
| 69 | Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ  исемдәр | *01.03.* | | |
| 70 | Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ  исемдәр | *02.03.* | | |
| 71 | **Исемдәрҙең яһалышы.** Ялғауҙар ҡушыу юлы менән исем яһалыу | *07.03.* | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 72 | Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән исем яһалыу | *09.03.* | | |
| 73 | Һүҙҙәрҙе парлау юлы менән исем яһалыу | *14.03.* | | |
| 74 | Һүҙҙәрҙе бәйләү һәм ҡыҫҡартыу юлы менән исем яһалыу. | *15.03.* | | |
| 75 | «Исем» темаһын ҡабатлау | *16.03.* | | |
| 76 | **Контроль диктант. Халыҡ шағиры.** | *21.03.* | | |
| 77<br>78 | **Хаталар өҫтөндә эш.**<br>**Изложение. Урман докторы.** | *22.03.*<br>*23.03.* | | |
| **IV сирек** | | | | |
| 79 | **Ҡылым. Мәғәнәһе, морфологик билдәләре, синтаксик роле.** | *04.04.* | | |
| 80 | Ҡылымдарҙың заман, зат һәм һан менән үҙгәреше | *05.04.* | | |
| 81 | Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар. | *06.04.* | | |
| 82 | **Инша. М. Нестеров. «Яҙ» картинаһы** | *11.04.* | | |
| 83 | Тамыр һәм нигеҙ ҡылымдар | *12.04.* | | |
| 84 | Ҡылымдарҙың яһалышы | *13.04.* | | |
| 85 | Ҡылымдарҙың затлы формалары | *18.04.* | | |
| 86 | Бойороҡ һөйкәлеше | *19.04.* | | |
| 87 | Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының зат, һан һәм барлыҡ-юҡлыҡ менән үҙгәреше | *20.04.* | | |
| 88 | Хәбәр һөйкәлеше | *25.04.* | | |
| 89 | Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының заман менән үҙгәреше | *26.04.* | | |
| 90 | Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының үткән заманы | *27.04.* | | |
| 91 | Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының үткән заманы | *02.05.* | | |
| 92 | Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының хәҙерге заманы | *03.05.* | | |
| 93 | Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының киләсәк заманы | *04.05.* | | |
| 94 | Шарт һөйкәлеше | *10.05.* | | |
| 95 | Теләк һөйкәлеше | *11.05.* | | |
| 96 | «Ҡылым» темаһын ҡабатлау. Ҡылымдарға морфологик анализ. **(Өйгә эш: инша «Һаҙ томбойоғо сәскә ата» - 326-сы күнегеү)** | *16.05.* | | |
| 97 | **Изложение. Йәш дуҫтарға мөрәжәғәт** | *17.05.* | | |
| 98 | **Контроль диктант. Тәбиғәт ҡосағында.** | *18.05.* | | |
| 99 | **Хаталар өҫтөндә эш. Инша. 313- сө күнегеү. Р. Ишбулатов. «Өфөлә Еңеү байрамы».** | *23.05.* | | |
| 100 | **Үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм дөйөмләштереү.** | *24.05.* | | |
| 101 | **Йыллыҡ контроль диктант. Кемдәр шатлана?** | *25.05.* | | |
| 102 | **Хаталар өҫтөндә эш. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм дөйөмләштереү.** | *3.05.* | | |

**Календарь-тематик план. Башҡорт әҙәбиәте. 5-се класс. 2025/2026 уҡыу йылы**

| № | Темалар | План | Факт | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимны | 03. 09. | | |
| 2 | М.Ғафури. Нурлы мәктәп. | 04. 09. | | |
| 3, 4 | Р. Ниғмәти. Хәйерле юл һеҙгә.<br>Р. Ниғмәти. Хәйерле юл һеҙгә. | 10. 09.<br>11. 09. | | |
| 5, 6 | Р.Байбулатов. Ағас һәйкәл.<br>Р.Байбулатов. Ағас һәйкәл. | 17. 09.<br>18. 09. | | |
| 7 | Р.Байбулатов. Ағас һәйкәл.<br>Р.Фәхретдинов. Белем.<br>(« Нәсихәттәр» китабынан.) | 24. 09. | | |
| 8 | М.Кәрим. Уҡытыусыма.<br>Н.Нәжми. Беренсе дәрес. | 25. 09. | | |
| 9 | Лира Яҡшыбаева. Бәхетең үҙең менән. | 01. 10. | | |
| 10 | Д.Юлтый. Көҙ.<br>Али Карнай. Урманда. | 02. 10. | | |
| 11 | Али Карнай. Урманда.<br>Тасуирлау тураһында. | 08. 10. | | |
| 12 | Ғ. Рамазанов. Урак өҫтө.<br>Сағыштырыу тураһында. | 09.10. | | |
| 13, 14 | Ф. Аҡбулатова. Атай икмәге.<br>Ф. Аҡбулатова. Атай икмәге.<br>Хикәйә тураһында. | 15.10.<br>16. 10. | | |
| 15 | Ҡ. Аралбай. Башҡорт теле.<br>Р. Ғарипов. Туған тел. ТЕСТ. | 22. 10. | | |
| 16 | Б. Бикбай. Туған тел. Рус теле. | 23. 10. | | |
| 17 | Яттан тасуири һөйләү дәресе. | 05.11. | | |
| 18, 19 | Хәйҙәр Тапаҡов. Бибинур «улуәсәй».<br>Хәйҙәр Тапаҡов. Бибинур «улуәсәй». | 06. 11.<br>12. 11. | | |
| 20 | М. Ғафури. Балалар һәм китап.<br>Д. Бүләков. Яралы китап. | 13.11. | | |
| 21 | Д. Бүләков. Яралы китап. | 19. 11. | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 22 | Я.Ҡолмой. Ҡыҙыҡлы китап. Н.Иҙелбай. Иң яҡын дуҫ.Р.Фәхретдинов. Китап һәм уҡыу. «Нәсихәттәр» китабынан. | 20. 11. | | |
| 23 | **Башҡорт халыҡ ижады**.<br>***Әкиәттәр.*** Алпамыша батыр. | 26. 11. | | |
| 24 | Алпамыша батыр. | 27. 11. | | |
| 25 | Әминбәк. Синоним һәм омонимдар. | 03. 12. | | |
| 26 | Ҡәмән м-н Сәмән, картуф сәскән Сәлмән. Антонимдар. | 04. 12. | | |
| 27 | Айыу менән бал ҡорттары. Башҡорт халыҡ әкиәттәре. Әкиәт һөйләүселәр тураһында. | 10. 12. | | |
| 28 | Йомаҡтар. Мәҡәлдәр. | 11.12. | | |
| 29 | Башҡорт халыҡ йырҙары.<br>Таҡмаҡтар. | 17. 12. | | |
| 30 | Башҡорт халыҡ ижады. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. **Тест.** | 18.12. | | |
| 31 | **Боронғо башҡорт әҙәбиәттәре өлгөләре.**<br>С. Юлаев. Ҡайтып киләм. Яуҙа яраланғас…Йырҙарҙан. | 24. 12. | | |
| 32 | Ғәбдрәхим Усман. Егет булһаң…Ҡармасан менән Сәрмәсән.С. Якшығолов. Дим буйында яҙғы таң. Ямалетдин Юмаев. Шәкерт. | 25. 12. | | |
| 33 | Н.Нәжми. Беренсе ҡар.<br>Г.Юнысова. Ҡотло булһын яңы йыл! | 14. 01. | | |
| 34,<br>35 | Сәрүәр Сурина. Ҡышты ҡаршылағанда.(пьеса)<br>Хәсән Назар. Яуа ҡарҙар… | 15. 01.<br>21. 01. | | |
| 36 | Р. Ғарипов. Башҡортостан.<br>Ирек Кинйәбулатов. Дуҫлыҡ төйәге. | 22. 01. | | |
| 37 | М. Кәрим. Өс таған.<br>1)«Бөркөтлө»,«Күкрәктауҙағы әңгәмә» бүлектәре. | 28.01. | | |
| 38 | 2) «Башлыҡ һайлау», «Вәзирҙең беренсе һәләкәте» бүлектәре. | 29. 01. | | |
| 39 | 3) «Өсөнсө терәү», «Ҡаптыңмы балыҡ ҡарағы» бүлектәре. | 04. 02. | | |
| 40 | Р.Шәкүр. Урал батыр иле – сал Урал.<br>Рәшит Ниғмәти. Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар. | 05. 02. | | |
| 41 | Рәшит Ниғмәти. Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар. | 11. 02. | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 42<br>43 | Айһылыу Йәғәфәрова. Урал иле.<br>Айһылыу Йәғәфәрова. Урал иле. | 12. 02.<br>18. 02. | | |
| 44 | К. Кинйәбулатова. Әсә күңеле.<br>Х.Назар. Такта сәй. | 19. 02. | | |
| 45 | Ғәйфулла Вәлиев. Әсәйем фатихаһы. | 25. 02. | | |
| 46 | Ғәйфулла Вәлиев. Әсәйем фатихаһы. | 26. 02. | | |
| 47 | Инша. Әсә - бөйөк зат. | 04. 03. | | |
| 48 | Рәшит Назаров. Яҙ башы. Эпитет тураһында.<br>Д. Бүләков. Яҙғы ташҡын менән килгән бәхет. | 05. 03. | | |
| 49 | Д.Бүләков. Яҙғы ташҡын менән килгән бәхет. | 11. 03. | | |
| 50 | Шәриф Бикҡол. Яҙғы уйҙар. | 12. 03. | | |
| 51 | III сиректә үтелгәндәр буйынса тест. Р.Ниғмәти һүҙҙәре, З.Исмәғилев музыкаһы. Еңеүселәргә дан! | 18. 03. | | |
| 52 | Йәмил Мостафин. Ыласын. | 19. 03. | | |
| 53 | Йәмил Мостафин. Ыласын.<br>М.Кәрим. Билдәһеҙ һалдат. | 25. 03. | | |
| 54 | Талха Ғиниәтуллин. Миҙал. | 26. 03. | | |
| 55 | Талха Ғиниәтуллин. Миҙал.<br>Шиғри телмәр һәм проза телмәре. Хикәйәләү. | 08. 04. | | |
| 56 | Али Карнай. Турғай.<br>Р. Ғарипов. Һабантурғай. | 09.04. | | |
| 57<br>58, | З. Хисмәтуллин. Урман kунағы.<br>З. Хисмәтуллин. Урман kунағы. | 15. 04.<br>16. 04. | | |
| 59 | Сәғит Агиш. Турыkай.<br>Т. Йосопов. Ерән kашkа . | 22. 04. | | |
| 60 | К.Кинйәбулатова. Барыһы тыуған еремдә.<br>А.Игебаев. Һыу буйында балыҡсы. | 23. 04. | | |
| 61<br>62 | Ф.Иҫәнғолов. Хәмит күпере.<br>Ф.Иҫәнғолов. Хәмит күпере. Характеристика тураһында. | 29. 04.<br>30. 04. | | |
| 63 | Мөслим Әбсәләмов. Йомағужа тирәктәре. | 06. 05. | | |
| 64 | Муса Йәлил. Йырҙарым.<br>Сабит Моҡанов. Минең республикам. | 07. 05. | | |
| 65 | Дәрдмәнд. Нурый менән Зәйнәб.<br>Бер хазина. | 13. 05. | | |
| 66 | Үтелгәндәр буйынса **тест** | 14.05. | | |
| 67 | Үтелгәндәрҙе kабатлау. | 20.05. | | |
| 68 | Йомғаҡлау | 21.05. | | |